*Юлды **ҡыҫҡартырға була** урман һаҡсыһы тайғанан киткән. Ҡапыл яҡында ғына ниндәйҙер тауыш **ишетелгәндәй булған**. Урман һаҡсыһы тауыш килгән яҡҡа боролған һәм **бәләкәй быҙауҙай ғына** болан балаһын күргән. Ул болан балаһын яурынына һалған да күтәреп өйгә алып ҡайтҡан. **Көндәр үтә торған**, болан балаһы кешегә эйәләшә барған. Хатта бер ваҡыт урманда боландарға осраған, **шулай ҙа** уларҙан ҡасып киткән һәм хужаһы янына кире ҡайтҡан.*

*(Ә.Вахитов буйынса.)*

**23. Киҫәксәләрҙе табып, төрҙәрен билдәләгеҙ, дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ:**

*Юл буйҙары гөлгә тулған*
*Ике йәп-йәш кеше юлдан*
*Атлай тын ғына.*
*Алдарында ап-аҡ арба,*
*Ә арбала йәп-йәш бала*
*Йоҡлай тын ғына.*
*Уға ҡарап йотолғандар,*
*Икеһе лә тотонғандар*
*Көмөш арбаға.*
*Ҡараштары нурға тулған,*
*Әйтерһең дә, ҡояш ҡунған*
*Ошо арбаға.* (Н.Нәжми.)

**24. Күп нөктәләр урынына киҫәксәләр ҡуйып, йырҙарҙы күсереп яҙығыҙ. Киҫәксәләрҙең төрөн билдәләгеҙ.**

Ике ... ... егет бесән саба
Урал буйында ... сабында.
Ҡайҙа ... ... йөрөмәй, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй ицән ... сағында. ("Уйыл".)
Ҡурайсы ... менән , ай йырауcы
Тәҙ(е)рәләш ... торһа...
Ҡурайсы ... менән йырауcының
Ғүмерҙәре бөтмәҫ булһа... ("Мәжлес йәме".)
Ҡысҡырма..., кәкүк, ай, яҡында,
Кәкүк өсөн түгел тал-тирәк.
Яна ... тиһәң, ялҡыны юҡ,
Ялҡынһыҙ ... яна был йөрәк. ("Ҡысҡырмасы, кәкүк".)
Тау аҫтында һалҡын шишмә
Сылтыр-сылтыр аға...,
Ижтиһат ит, эшкә башла,
Ғүмер үтеп бара... ("Һалҡын шишмә")
Әрмеләрҙә йөрөп, сәс еткерҙем,
Сәс...йем етте ... үрмәгә.
Ризыҡ яҙған булһа, бер ҡайтырбыҙ
Тыуған еркәйҙәрҙе ... күрмәгә. ("Әрмә")
Айҡай ... ... сайҡай керҙәр йыуа,
Һай кем, керҙәр йыуғанда
Талмай... ... уның беләккәйҙәре.
Һай кем, сайҡағанда. ("Ҡаруанһарай")

**25. Аҫтына һыҙылған һүҙбәйләнештәрҙе теркәүес ҡулланырлыҡ итеп үҙгәртегеҙ.**

Ялсылар өйөндәге урындыҡҡа йөҙ түбән һуҙылып төшөп <u>ятҡан көйө</u> бик оҙаҡ һөйләштеләр. Уҡтар <u>һыҙғырыуынан</u> күк күкрәп торған. Тимеркәйҙең <u>көйө көйләнмәгәс</u> һүрәте лә матур булып төшмәне. Күнәк дөбөрләгәнен <u>ишетеү менән</u> һин артҡы ҡапҡаға кил.

**26. Күп нөктәләр урынына мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ.**

Әле генә имән төбөндәге эскәмйәләрҙәге сүп-сарҙы һепереп ташланым, ..., был эште миңә анау күгәрсен күҙҙәре ҡушты. ..., башта уларҙың сафлығына һоҡланып ҡарап торҙом да, үҙем һиҙмәҫтән ҡулыма һепертке алдым. Һеперткегә мин былай һирәк тотонам. Донъя сүбен бер мин генә һепереп бөтөрә алмам, тим.

Ваҡ-төйәк нәмәләрҙең онотолмауы тураһындағы фекргә шуны өҫтәргә ...: күп йәһәттән хикмәт ваҡиғаларҙың ниндәй булыуында ..., һинең

рухыңдың, аңыңдың, хәтерләү аппаратыңдың нисек, ниндәй тулкынға көйләнеүендә. Улар бәғзе нәмәләрҙе ғүмерлеккә үҙләштереп кала, нимәләрҙелер үткәрә лә ебәрә. (М.Кәрим.)

**27. Түбәндәге һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙығыҙ, уларҙың һөйләм киҫәге булыу-булмауын әйтегеҙ.**

Бәлки, Таймаҫ беҙҙең исемдән ризалыҡ бирергә лә өлгөргәндер. (Б.Рафиҡов.) юҡ, бригадаға күмәк көс туплап ҡына әллә ни оло уңыштарға өлгәшеп булмай икән. ("Ағиҙел".) элекке яугир ҡатын-ҡыҙҙарҙан да буш ваҡытын ижади эштәргә арнаусылар юҡ түгел. ("Башҡортостан ҡыҙы".) эйә, йылмайып баш ҡағыу менән генә ҡотолорлоҡ түгел был йортта. (Б.Рафиҡов.) күп һуғыш тәжрибәһе туплаған Беренсе башҡорт полкы хәрәкәтһеҙ торорға тейеш түгел (Я.Хамматов.) мал аҫырарға кәрәкме – кәрәк, мал аҙығы әҙерләргә кәрәкме – кәрәк, иалды көтөүҙә йөрөтөргә кәрәкме – кәрәк. ("Совет башҡортостаны".) ысын дуҫлыҡ дан, дәрәжә һәм материаль яҡҡа нигеҙләнеп ҡоролорға тейеш түгел. (И.Абдуллин.)

**28. Башҡорт яҙыусыларының эҫәрҙәренән ымлыҡтары булған алты һөйләм табығыҙ, ымлыҡтарҙың һөйләм киҫәктәре булыу-булмауҙарын әйтегеҙ.**

**29. Һөйләмдәрҙән ымлыҡтарҙы табып, уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.**

Ҡайҙа барып төртөлөргә белмәй йөрөй торғас, "Камера хранения" тигән яҙыу күҙемә ташланды. Әһә, сумаҙанды ошонда тапшырырға мөмкиндер бит! Уф, шул саҡта ниҙәр кисергәнемде белһәң ине. Эй-йй ҡоҙағыйҡайым, был донъя мәшәҡәтенән һис кенә лә бушанып булмай. Бәй-бәй килен, көпә-көндөҙ ниндәй юҡ-бар ҡарап ултыраһың ул? Ай-һай, үҙең дә һере кеше икәнһең, - тип баш сайҡап ҡаршылана уны Байрамғол. –Килеп етә алмаҫһың тигәйнем. Сеү, ҡысҡырма, анау кеше тағы атып ебәрһә...

(Н.Мусин.)

**30. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Оҡшатыу һүҙҙәрен табып, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ. Үҙегеҙ белгән телдәрҙәге оҡшатыу һүҙҙәрен ҡулланып, тексты дауам итегеҙ.**

Кем ниндәй тауыш сығара?

Яңғыҙ ҙа – "ҡарҡ-ҡарҡ", күмәк тә - "ҡарҡ-ҡарҡ", ҡурҡһа ла – "ҡарҡ-ҡарҡ", балаларын саҡырһа ла – "ҡарҡ-ҡарҡ". Бына шуның өсөн был ҡошто ҡарға тип исемләгәндәр. Башҡорт телендә тәбиғәттәге күп кенә ҡоштарҙы сығарған тауыштары буйынса атап йөрөтәләр: кәкүк, һеҙһөт, сәүкә, сыйырсыҡ, торна, тартай, сарлаҡ, сәпсек, килейек, ҡағараҡ, сипылдаҡ, тәтелдәүес...

*Бер үк тауышты төрлө телдәрҙә төрлөсә бирәләр: этәс башҡорттарҙа "ки-ке-ри-күк", немецтарҙа "ки-ке-ри-ки", рустарҙа "ку-ка-ре-ку", французлдарҙа "ко-ко-ро-ко", итальяндарҙа "чи-ки-ри-ки", инглиздәрҙә "кок-э-дуидл-ду", ҡытайҙарҙа "во-во" тип ҡысҡыра икән.*

*Төрлө илдәрҙә этәстәр төрлөсә ҡысҡыра микән? Юҡ, бындай оҡшаш тауыштарҙы һәр халыҡ үҙ телендәге өн үҙенсәлектәренән сығып тапшыра.*

*Рус менән поляктан бер юлы: "Нимә "квак-квак" тип ҡысҡыра?" – тип һораһаң, рус: "Телмәрйен", - тип, ә поляк: "Өйрәк", - тип яуап ҡайтарыр ине.* (Э.Ишбирҙин.)

**31. Мәҡәлдәрҙең һүҙбәйләнештәрен схемала бирелгәнсә айырып күрһәтегеҙ. Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.**

*Аҡҡа ҡара тиҙ тейә. Алтын сүплектә лә ялтырай. Һандуғас юҡ йылды ҡарға дан тотор. Шайтан таяғын ҡырау һуҡмай. Күҙең менән күрмәгәнде ауыҙың менән һөйләмә. Яман хәбәр тиҙ тарала. Уҡымаған күҙлене уҡыған һуҡыр еңгән. Ҡәләм ҡылыстан үткер.*

**32. Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙән башта теҙмә юл, һуңынан эйәртеүле юл менән барлыҡҡа килгәндәрен күсереп алығыҙ. Эйәртеүле һүҙбәйләнештәрҙең төрҙәрен билдәләгеҙ.**

*Ҡаланан ҡайттыҡ, урманға тиклем барҙыҡ, ат менән һыйыр, атҡа ла, һыйырға ла, иланы ла иланы, шөп йүгерә, бысраҡ юл, ҡысҡырып һөйләшә, тау бите, атайымдың портфеле, кәзә һөтө, мөхәббәт һәм нәфрәт, яҡшы уҡый, сыҡҡан да киткән, еләк йыя, ат ҡарай, матур күлдәк, ул ҡайтты.*

**33. Түбәндәге һүҙҙәрҙең төүге төркөмөн эйәртеүсе, икенселәрен эйәреүсе итеп, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ. Уларҙың бәйләнеш төрҙәрен әйтегеҙ.**

1. *Ҡала, урманы, ярата, һәләтле, йөрөй, күркәм, ҡәләм, тейеш, кәрәк.*
2. *Ҡыҙыл, уҡығандың, яҡшы, эшкә, ҡарағай, былай, һеҙҙең, хушлашыу, шаярып.*

**34. Түбәндәге һөйләмдәрҙе һүҙбәйләнештәргә тарҡатығыҙ, уларҙың мәғәнә мөнәсәбәтен һәм грамматик бәйләнеш төрөн күрһәтегеҙ, эйәртеүсе киҫәген билдәләгеҙ.**

*Тора-бара үҙенең холҡон күрһәтә башланы: көн дә тиерлек эсеп ҡайта, Ғәлиәгә юҡ-бар өсөн дә бәйләнә, тауыш ҡуптара торған булып китте.* (Н.Мусин). *Ғибат үҙе аяҡсы булып йөрөгән булған.* (Ж. Кейекбаев). *Ул иҫтәлекле иртәлә Флүрә үҙенең бүлмәһендә ултыра һәм ҡото осоп сәғәткә ҡарай ине.* (Ш. Хажиәхмәтов). *Солан тупһаһынан тайып киттмәҫ өсөн, көмөш һаплы таяғын һаҡ ҡына алдан төшөрҙө, уның артынса аяҡтарын шыуҙырҙы.* (Р. Ураҙғолов).

**35. Текстан бер составлы һөйләмдәрҙе табығыҙ, төрөн билдәләгеҙ.**

*Аяҙ күктә, бейектә-бейектә, торналар тубы оса. Уларҙың моңло сыңрауы һауаларҙы ярып алыҫтарға тарала. Тыуған ерҙән туймаһалар ҙа, ҡышҡылыҡҡа туйыныуҙлыҡ ерҙәргә – йылы яҡтарға китәләр.*

*Беҙҙең яҡтарҙа торналарҙың 14 төрө билдәле булһа ла, иң киң таралғаны – һоро торна. Оҙон ҡара муйынлы был ҡоштоң томшоғо йәшкелт һары төҫтә була, башында аҡ ҡуырһындар үҫә, ҡойроғо ҡуйы, оҙон ҡауырйылы, ҡарараҡ төҫтә, аяҡтары ҡара. Һоро торналар һаҙлыҡтарҙа, тәпәш ҡыуаҡтар араһында, ер өҫтөнә оя ҡора. Ғәҙәттә ике йомортҡа һалып, бала сығара. Улар үҫемлек, төрлө бөжәктәрҙе, тәлмәрйендәрҙе, кеҫәрткеләрҙе, ваҡ киимереүселәрҙе ашай.*

*Был ҡоштарҙы атыу бөтә ерҙә лә тыйылған. Башҡорттарҙа борондан ҡалған юрау ҙа бар – торна атһаң, ҡаҙа килә, тиҙәр. Шуға ла халыҡта торналарҙың ояларын туҙҙырмайҙар.*

*( Е. Кучеровтан.)*

**36. Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ. Ниндәй һөйләм киҫәктәре айырымланған?**

*Дом, довольно большой, когда-то беленый, с блестящей мокрой крышей, стоял на совершенно голом месте. (И.Бунин). Из спальни вела куда-то еще одна дверь, тоже затворенная. (А.Чехов). Прошел Макаров, в черном, строгом костюме, стройный, седой, с нахмуренными бровями. (М.Горький). Вернувшись в гостиницу, Лопатин лег в постель,так и не поев в этот день. (К.Симонов). Зайцы, спасаясь от лыжников, путали сложные петли. (К.Паустовский). Русские литераторы-дворяне, за исключением всеведавшего Александра Пушкина, не обратили внимания на фольклор, крайне богатый драматическими материалом. Своим делом он занимался спустя рукава, потому что больница все еще строилась. (Мамин-Сибиряк). На другой день, часу в первом, Литвинов отправился к Осининым.( С.Тургенев.)*

**37. Өҙөктө уҡығыҙ. Ҡурай тураһында әйтелгән фекерҙәр менән риҙаһығыҙмы? Иҫбатлап һөйләгеҙ. Тиң киҫәктәрҙе табығыҙ: улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып, ниндәй һүҙ төркөмдәренән килгәндәр, үҙ-ара нисек бәйләнгәндәр?**

*Ҡыҫҡырмай Аҫылбай, күкрәк менән йырлай, рәхмәт төшкөрө, моңо, әйтерһең, йөрәгенән һығылып сыға. Электән, бала саҡтан уҡ тыныс ҡына тыңлай алмай ҡурай моңон Әхмәтҙәки. Ҡайҙалыр йыраҡҡа, сал тарихҡа, аҡбуҙаттар, Урал батырҙар тормошона алып киткәндәй, онотолған тойғоларҙы, йоҡомһораған тамырҙарҙы терелтеп ебәргәндәй ҡурай моңо... Тыпыр-тыпыр аттар уҙышҡаны, йәшел туғайҙарҙа ҡойроҡ сәнсеп ҡолондар*

*сабышҡаны, тау яғалап ҡыйҙар йөрөгәне, үләндәр, йылғалар һөйләшкәне лә, балаларын юғалтҡан инә бүре илауы, ер һыҡтауы ла бар унда... Тәбиғәттә үҫкәнгә шулай тәбиғи моңдар сығара микән ул? Их ҡурай, моңло ҡурай...*

*(Р.Байымов.)*

**38. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ. Тиң киҫәктәрҙе һәм уларҙы дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙе табып, аҫтарына һыҙығыҙ, уларҙың ниндәй һөйләм киҫәге булыуын белегеҙ.**

*Мансур һиҙҙермәй генә Мәрзиәгә күҙ һалды. Үҙгәргәнме? Әйтерҙе ҡыйын ине. Көлгән саҡта башын артҡа ташлай биреүе битенең уйылып китеүе ҡаштарының үргә сөйөлөүе бөтәһе лә элекке Мәрзиәне хәтерләткәндәй. Эйе, ете йыл әҙ ғүмер түгел. Үҙгәргән Мәрзиә. Элгәре ул һис кенә лә тик ултырмаҫ йә берәй мәҙәк табыр йә синыфташтарын эшкә егер ине. Хәҙер иһә... уйы менән әллә ҡайҙа гиҙә ҡарашы бер һүнә бер тоҡанып ҡуя. Моғайын, һуғыш хәтирәләре зиһенен айҡайҙыр. Етмәһә, ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған сәсе йылмайғанда йылтырап киткән алтын теше һәммәһе лә сырайына ятыраҡ һыҙаттар өҫтәй.*

*(Ә.Хәкимов.)*

**39. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, өҙөктө күсереп яҙығыҙ. Айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе табып, аҫтарына һыҙығыҙ, уларҙың ни өсөн айырымланып ҡулланылыуын аңлатығыҙ.**

*Беҙҙең халыҡтың башҡорттарҙың ата-бабаларҙан ҡалған бер сифаты бар. Уны был сифатты ул бер ҡасан да онотмай. Ул да булһа, батырлыҡ, һуғышсанлыҡ сифаты. Урыны килгәндә уның менән маҡтанып ебәрергә лә ярата. Әйтәйек, урыҫ ғәскәрҙәре сафында Наполеонды ҡыуып Парижға беренсе булып барып инеүен дә онотмай. Петроградты ҡамаған Юденичяуҙарын тар-мар итеүҙә ҡатнашыуын да ҙур ғорурлыҡ менән иҫкә ала. Ә бына үҙенең әсә теленә хөрмәт тәрбиәләргә кәрәклекте ул онота. Улай ғына ла түгел, хатта үҙенең туған теленән көмһенә. Борондан батша заманынан тороп ҡалған хата ҡараш. Бына шул ҡараштан сығып ул балаһын үҙ телендә асылған мәктәпкә бирергә теләмәй тора. Ул ахмаҡ урыҫ йәки татар телен генә хөрмәт итә, уларға мәктәп теле, белем теле тип ҡарай. Ә үҙ теле – ҡара халыҡ теле... Бына бит ниндәй хата ҡарашҡа өйрәнгәнбеҙ беҙ тилеләр! Ә бит беҙҙең бик борондан килгән ғәжәп бай, сәсән, йор телебеҙ бар. Үлмәҫ йырҙарыбыҙҙы, моңдарыбыҙҙы, хикмәтле хикәйәттәребеҙҙе, легендаларыбыҙҙы шул телдә тыуҙырған бит халыҡ!*

*(З.Биишева.)*

**40. Түбәндәге инеш һүҙҙәрҙе ҡулланып, бәйләнешле текст яҙығыҙ:** *билдәле, һис шикһеҙ, беҙҙеңсә, беренсенән, ахыры, моғайын, ҡыуанысҡа күрә, әйтеүҙәренә ҡарағанда, эйе.*

**41. Бирелгән инеш һөйләмдәргә синтаксик анализ эшләгеҙ, гәзит-журналдарҙан инеш һөйләмдәр яҙып алығыҙ.**

Эйе, уҡыу тураһында хәҙер миңә эштә лә, йәштәр ойошмаһында ла, өйҙә әсәйем дә (әсәйемде мин бында күптән күсереп алып килдем, ул хәҙер йәш ҡаланың төп кешеләренең береһе) иҫкәртеп кенә торалар. (З.Биишева). Күҙлекле, аҡ сәсле директор ( ул Әхнәф дауалаған госпиталдең хирургына бик оҡшаған) Әхнәфте цех начальнигына ебәрҙе. (И. Абдуллин). Башҡортса моңло итеп оҙон көйҙәргә йырлап ебәрергә ярай (шуны ла асыҡлап китәйем: беҙҙең ауылда элек ҡыҫҡа көйҙәрҙебоҙоборак булһа ла татарса йҫырлай торғайнылар). (С. Агиш) Беҙҙең класс етәксеһе теге Кәримә апай( беҙ башланғыс мәктәпте бөткәнсе, ул, ситтән тороп уҡып институтты тамамлап алғанлыҡтан, һаман беҙҙең класс етәксеһе булып ҡалды) һәр бер балаға характеристика бирер сығырға ярата. (З. Биишева). Әле бахыр шинель әллә ҡайҙа көмһенеп ята кеүек мөйөштә ( ҡара пальто тәнгә хужа булғас, эшләп булмай инде бер эш тә). ( Б.Ишемғол). Һөйәм уны шундай булғаны өсөн, тәрлә булған өсөн көндәре (әгәр ерҙә гел яҙ ғына булһа, ни яҙлығы уның, ни йәме?). (Н. Нәжми). Украина яландарында ҡурай үҫмәй, имеш (мин уны, әлбиттә, артыҡ төпсөмәнем, был яңылыш булған булһа, мине ғәфү итегеҙ). (С. Агиш).

**42. Әҙәби әҫәрҙәрҙән түбәндәге схемаларға ярашлы һөйләмдәр табып яҙығыҙ.**

1. "Т, – а. – Т?"
2. "Т? – а. – Т".
3. "Т! – а. – Т".
3. "Т, – а, – т".

**43. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙығыҙ. Тура телмәрҙең ниндәй төрҙәре ҡулланылған.**

Райком сәркәтибе менән колхоз рәйесе килеп төшкәндә, сөгөлдөрсөләр төшкә туҡтаған саҡ ине. Уларҙы ла табынға саҡырҙылар. Ғәлим Аллабирҙинға ла таҫтамал тоторҙо аш бешереүсе.

Шишмәгә төшөп йыуынып алығыҙ. Хәл кереп китер.

Йыуынып–һөртөнөп, Аллабирҙин егеттәр янына килде.

Аштар тәмле булһын, тине ул, иҫәнлек–һаулыҡ һорашҡас.

Уға ялан кухняһынан боҫорап торған аш һалып бирҙеләр. Улар һөйләшә-һөйләшә ашаны.

Эштәр нисек, егеттәр?

Хәҙергә арыу кеүек.

Күп кәметтегеҙме әле?

Яртылашып киләбеҙ инде.

Уңыш ни рәүешлерәк?

Гектарҙан өс йөҙ центнерҙан кәм түгел шикелле.

Аллабирҙин ҡуйын дәфтәрен алды. Ҡапыл, нимәлер иҫенә төшөп, Айсыуаҡҡа боролдо.

Ә теге иртә сәселгән ерҙе сығарҙығыҙмы әллә?

Кисә һуңғы машиналарҙы оҙаттыҡ.

Хажиәхмәт ҡушылды:

Уның гектарынан өс йөҙ иллешәр центнер сыҡты!

Өс йөҙ иллешәр?

Эйе.

Бына быныһы уңыш исмаһам. Аллабирҙин тулҡынланыу менән егеттәрҙең ҡулын ҡыҫты. Ҙур эш быныһы...

(Т. Килмөхәмәтов.)

**44. Тура телмәрҙе һәм автор һүҙҙәрен табып, өҙөктө дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.**

Әбүбәкер башын күтәрҙе, арҡаһын үҙе ятҡан карауатҡа терәп, ҡыуанысынан аяҙ көндө мөлдөрәп ятҡан диңгеҙҙәй балҡыған күҙҙәрен түшәмгә төбәне мин бер ҡыҙ менән таныштым, Лидия Николаевна

Ҡыҙ... Лидия баҙнатһыҙ ғына күҙен күтәрҙе һуңғы осор музыкаға ҡарағанда һинең тормошңда ҡыҙҙар күберәк урын билә й башламанымы икән?

О, Лидия Николаевна! Ғәйеплемен, яҙыҡтарым юҡ түгел, ләкин... бындай ҡыҙҙы һис осратҡаным юҡ ине. Күҙҙәрендә уның берсә йәшел урман, берсә диңгеҙ, берсә күк йөҙө. Ә буй-һыны, атлап китеүҙәре... Их! Лидия Николаевна, әллә ул минең күҙемә генә күренде ме икән? Әллә ул ... күктән төшкән берәй ҙат булдымы икән?!

Ысынлап шулай сибәрме?

Бына инде Әбүбәкер тороп, арлы-бирле йөрөштөрҙө, ҡыҙҙың һылыулығын тасуирларға һүҙҙәр таба алмай интекте. Шағир булһам, биллаһи, шиғыр яҙыр инем!

(Т.Ғарипова.)

**45. Шиғырҙы уҡығыҙ, һөйләм төрҙәрен асыҡлағыҙ. Тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ.**

Һынайҙар

Был донъяға килгән минуттан уҡ
Әҙәм затын һынау башлана.
Тикшерәләр ятыш-торошторҙы,
Күҙ һирпәләр төҫкә, башҡа ла,
Һынай урам, мәктәп, юлдар һынай,

Һынай мәжлес, һабан туйҙары.
Ҡыҙлы эсә егеттәрҙе һынай,
Уллы ата һынай ҡыҙҙарҙы.
Һынай хеҙмәт, һәм тәбиғәт һынай,
Дым көрәктә утта яндырып.
Урған-һуҡҡан саҡта үс иткәндәй
Көнө-төнө ямғыр яуҙырып...
Көтмәгәндә була ул тормоштоң
Һағыштарға һалған бер мәле.
Әҙәм балаһының юҡтыр ҙа ул
Һыналмайса торған көндәре.

(Ҡ.Әүхәтов.)

**46. Бирелгән һөйләмдәргә тулы синтаксик анализ эшләгеҙ.**

Ҡош һауала ғына осҡан кеүек, балыҡ һыуҙа йәшәгән кеүек, үҙ халҡына – эшселәргә барҙы баһадирҙай йәшәргә егет. (М. Хәй). Елеп тә генә елеп үтер инем, менгән дә генә атым кир булһа, башҡайымды алып китер инем, ышыҡланып торор ер булһа. (Халыҡ йыры). Һылыу Днепр менән уйсан Ағиҙелде меңәр саҡырымдар айырһа ла улар араһындағы юлдарҙы дәһшәтле һуғыш йылдарында ут-ялҡындар көртәләп торһа ла, Украина менән Башҡортостан араһындағы дуҫлыҡ юлының һис ҡасан өҙөлгәне юҡ. (Р. Бикбаев). Сәрмәсән буйындағы әрәмәлектә быйыл ҡара бөрлөгән шул тиклем уңды, сентябрь етеүгә ҡарамаҫтан, кешеләр күнәк тултырып йыйып ҡайталар. (Р.Ғабдрахманов). Ҡарсығалар ҡая һайлағандар, олатайҙар тауҙы һайлаған, шуға ла улар нигеҙ ташын далаларға барып һалмаған. (Ғ.Дәүләтов). Кешеләрҙең төштәренә күк күкрәүе бомба шартлаған кеүек кермәһен өсөн тағы ла уяуыраҡ торам һаҡта. (Ғ.Ибраһимов). Урман батыр, ахыр сиктә, асыуланып ҡылысы менән һаҙға һелтәп ебәрәһә, ҡылыс инеп киткән урындан урғып һыу сыға башлаған. (Ж. Кейекбаев). Яуап биреүсе булмағас, Касьянов күсер киткән яҡҡа бер-ике аҙым яһаны ла кире боролдо. (Я. Хамматов). Аяҡтары талғансы, Ҡасҡын тау артынан ҡояш күтәрелгәнсе, Ҡаҙаяҡ буйында йөрөйҙәр Әхмәт менән Сания. (Ә.Хәкимов).

**47. Түбәндәге ҡушма һөйләмдәрҙең теркәүес менән килгәндәрен бер бағанаға, теркәүесһеҙләрен икенсе бағанаға бүлеп яҙығыҙ, синтаксик анализ эшләгеҙ.**

Ул мине йоҡонан бик иртә уятты ла, мин ат эҙләргә киттем. (Ә. Чаныш). Алтын да бар Уралда, көмөш тә бар Уралда, Урал – бай тау ул. (Ҡ. Даян). Үтте ҡыш, килде матур яҙ, боҙло ҡарҙар иренеләр, көҙ көнө киткән матур ҡоштар тағы ла килделәр. (М.Ғафури). Көслө елдәр,штормдар булды, хатта баржалар Кама менән Волга ярҙарына

ырғытылды. (Ә.Бикчәнтәев). Кис менән ҡайһыһы ашай, эсә, ҡайһылары балаларын йоҡлата, ҡайһылары бисәһе менән талаша, ҡайһылары йыйылып ултыралар ҙа күргәндәрен, белгәндәрен һөйләшәләр. (А. Таһиров).

Иртәнгеһенә иртәнсәк иптәштәре урманға киткән, ә Аҡъял батыр өйҙә ҡалған. ("Аҡъял батыр" әкиәте). Башҡорт халҡының ике яратҡан әйбере бар: уның береһе ҡымыҙ, икенсеһе – сәй. (М.Тажи). Был һуғыштвр ауыр булды, бик күп ҡандар түгелде, йәп-йәш кенә меҫкен йәндәр ҡара ергә күмелде. ("Рус- төрөк һуғышы бәйете"). Тау араһынан барғанда ҡояш рәтле күренмәй: йә уны эре ағастар ҡаплай, йә бейек тауҙар был ерҙән йәшереп торалар. (М. Ғафури). Ҡояш балҡыр, ер әйләнеп торор,яҙҙар булыр, ағыр йылғалар. (Б.Бикбай). Күлде ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай. (Халыҡ мәҡәле). Мине икенсе бригадаға ебәрергә маташып ҡараны – булманы. (А. Карнай). Ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теҙмә ҡушма һөйләм өлөштәре араһында тыныш билдәләре.

**48. Күрһәтелгән схема буйынса һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.**



**49. Уҡығыҙ. Теркәүестәрҙең нимәләрҙе бәйләп килеүен асыҡлағыҙ. Тыныш билдәләренә иғтибар итеп, теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе һайлап күсерегеҙ. Ҡалын хәрефле һүҙҙәргә синонимдар табығыҙ.**

Саң һәм һыу бағаналары

Планетабыҙҙың өҫтөндә ҡайһы саҡ **иҫ киткес** ҡеүәтле ҡойондар барлыҡҡа килә. Ҡырҙан ҡарағанда, ҡойон һығылмалы ғәйәт ҙур шлангығы оҡшаш. Уның бер осо болоттарға **олғашҡан**, ә икенсе осоергә тоташҡан була. Ҡойондарҙың диаметры йөҙәр метрға, ә ҡайһы саҡ 2 – 2,5 километрға етә. Ҡойон эсендә һауа иҫ киткес ҙур көс менән өйрөлә, хатта өйрөлөү тиҙлеге секундына 120 метрға етә. Ҡойон эсендә баҫым бик ныҡ кәмей, һәм һауа ҙур

ҡеүәт менән ерҙән болоттарға атлыға. Шул саҡта ҡойон **гигант** һурғысҡа оҡшай.

Ҡеүәтле ҡойондар ваҡытында барлыҡҡа килгән саң һәм һыу бағаналары "Аждаһа күтәрелеү" экиәттәрен килтереп сығарған.

(Д.Бураҡаев буйынса.)

**50. Схемалар буйынса һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ. (О – тиң киҫәктәр, [ ] – һөйләм.)**

1. [О ҙә О]. 2. [ ] ҙә, [ ]. 3. [О, хатта О]. 4. [О, ләкин О]. 5. [ ], һәм [ ]. 6. [ ], тик [ ]. 7. [ ], [ ]. 8. [ ] – [ ]. 9. [ ]: [ ].

**51. Бирелгән һөйләмдәрҙең тыныш билдәләрен ҡуйып, эйәрсән һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.**

Кем үткәрә баштан ауыр ҡайғы шул ныҡ белә йәшәү ҡәҙерен тормош матурлана барған һайын һалҡыныраҡ тоя ҡәберҙе. (Б.Бикбай). Тик шуныһы аңлашылмай ниңә минең атай ауырыуға шатланалар улар. (Ә.Чаныш). Инһәк картина шундай бүлмәләге башҡа тороусылар береһе лә юҡ. (А.Карнай). Һуғыш арҡаһында аҙыҡ-түлек хаҡтары күтәрелеп киткән ҡалаға ҡыш сыҡҡансы ит май тейәп бер нисә тапҡыр барып ҡайта Собханғол старшина. (З. Биишева). Әгәр ҙә беҙ әйткән китап журналды ебәрмәһәң бөтәбеҙ ҙә үпкәләрбеҙ. (Д. Юлтый). Сөмбөлдөң баҡсасылары янына Гүзәл менән бригадир алып килгән колхозсылар ҙа ҡушылғас яр буйы бөтөнләй йәнләнеп китте. (И. Ғиззәтуллин). Нигеҙен халыҡ ҡорған ҙур бинаны ил ҡушҡанса һалдыҡ беҙ дошмандарҙың һөжүменән һаҡлап еңеүселәр булып ҡалдыҡ беҙ. (С.Ҡудаш). Мин ышанам беҙ әҙерләгән ошо бригада ла йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәс. (Ф. Исәнғолов). Атайым да ҡышын бөткәс Ырымбурҙан ҡайтҡан һайын Көпөлө урманын йәйәүләп уҙыуы бигерәк тә ҡыйын булды тип һөйләй торғайны. (З.Биишева). Мотор тауышы ҡамасаулағанлыҡтан Кәрим әйткәнде ишетмәгән Әбүҙәр бер ни ҙә аңламайынса башын ҡалҡытып ҡараны. (Я. Хамматов).

**52. Мәҡәл һәм әйтемдәрҙе уҡығыҙ. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе тикшереп, эйәрсән һөйләм төрҙәрен мәҡәлдәр бирелгән тәртиптә яҙығыҙ. Үҙегеҙ эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙән төҙөлгән мәҡәлдәр табып яҙығыҙ.**

Ауыҙың ни әйтһә, ҡолағың шуны ишетһен. Көн тыуғас, айҙың төҫө китер. Һыйыры барҙың һыйы бар. Тирә-яғың яу булһа, өйөң эсе һау булмаç. Кем тапҡан, шул баҡһын. Күктән кейеҙ яуһа ла, ҡолға олтораҡ теймәç. Ҡорал кемдеке – заман шуныҡы. Йөҙөң нindәй булһа, көҙгөң шулай күрһәтер. Күҙ ҡайҙа булһа – күңел шунда. Өлкән өйҙәге көлгәнгә, кесе өйҙәге ыржайған. Һандуғас һайрай тип, ҡарға ҡысҡырған.

**53. Башҡорт халыҡ йырҙары менән экиәттәренән баш һөйләмгә килеш ялғауҙары ярҙамында бәйләнгән эйәрсән һөйләмле алты эйәртеүле ҡушма һөйләм яҙып алығыҙ, эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәрен әйтегеҙ, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ.**

**54. Ҡатмарлы синтаксик конструкцияларҙың схемаһын һыҙығыҙ.**

Минең теләк шул: Аҡташ шишмәһенә киләсәктә лә юл өҙөлмәһен, уның һуҡмағын үлән ҡапламаһын. (Ғ.Аллаяров). Хәҙер миңә быға тиклем әҙәм күҙе күрмәгән, әҙәм ҡолағы ишетмәгән сер асыласаҡ. (М.Кәрим). Мин, был йортҡа бер ваҡытта ла ҡайғы-хәсрәт һуғылмағандыр, донъя шауҡымы теймәгәндер, тип уйлағайным. (Ш. Янбаев). Иртәнсәк ҡояш ҡалҡҡанда, кис ҡояш байығанда, эре, ауыр бойҙай башаҡтары ҡалын ҡамыл араһында ялтырап күренеүсән булалар. (һ.Дәүләтшина). Мин һеҙҙең менән китергә, күп кешеләр эшләй торған ергә, шатлыҡ күберәк ергә китергә теләйем. (Ф. Исәнғолов). Сыҡмаған йән тәндә булғас, йән эйәһе бәндә булғас, күҙе һиңә ҡарап торғас, ташларға көс етмәй икән. (М. Кәрим). Был һоҡланыу шундай көслө ине, хатта йәрәхәттең һулҡылдап һыҙлауы онотолдо, ҡурғаштай күҙ ҡабаҡтары еңеләйеп киткәндәй тойолдо. (Ш. Янбаев). Һылыу Днепр менән уйсан Ағиҙелде меңәр саҡрымдар айырһа ла, улар араһындағы юлдарҙы дәһшәтле һуғыш йылдарында ут-ялҡындар кәртәләп торһа ла, Украина менән Башҡортостан араһындағы дуҫлыҡ юлының һис ҡасан өҙөлгәне юҡ. (Р. Бикбаев). Һағынам мин, сабырлығым бөткәнсе, йөрәктәрем шартлай яҙып типкәнсе. (К.Кинйәбулатова).

**55. Күп эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ. Рус телендәге һөйләмдәр менән сағыштырығыҙ.**

Но барыни, нам не внимая, садились на извозчиков и уезжали, - из чего вы видите, что нам с Яшкой совсем не везло. (М. Горький). Самгин чувствовал, что это на него упала мягкая тяжесть, приплюснув к земле так, что подогнулись колени. (М.Горький). Если бы не духота и не спертый запах ржаного хлеба, укропа и лозы, от которого то захватывало дыхание, то тут, под соломенную крышею, отлично было бы прятаться от гостей. (А.Чехов). Часто осенью я следил за опадающими листьями, чтобы поймать ту незаметную долю секунды, когда лист отделяется от ветки и начинает падать на землю. (К. Паустовский). Тетка закрыла глаза, чтобы поскорее уснуть, так как она знала по опыту, что чем скорее уснешь, тем скорее наступит утро. (А.Чехов). Сделайте города такими, чтобы ими можно было гордиться, чтобы в них можно было работать, думать и отдыхать. (К. Паустовский). Я совершенно уверен, что у этого лорда есть что-то очень смешное, чего он стыдится, что тайно мучает его и отчего он так злобно пишет свои книги. (М. Горький).

**56. Түбәндәге теҙемдәрҙе дөрөҫ, тасуири итеп уҡығыҙ, уларҙың төрҙәрен билдәләгеҙ, баш киҫәктәр менән эйәрсән киҫәктәрҙе табығыҙ.**

*Шыр урманда маһайып,*
*Лап-лоп баҫыр айыулы;*
*Һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән*
*Ҡара бауыр төлкөлө;*
*Кемуҙарҙан һайраған,*
*Сыр-сыр килгән ҡош-ҡортло;*
*Һарайҙағы хан һымаҡ,*
*Эре йәшәр бөркөтлө;*
*Алдынан ҡош уҙғармаҫ*
*Күк ҡарсығы, ҡыйғырлы;*
*Ҡарасай, өйрәк көлөшкән*
*Ҡамышлы күл, йылғалы;*
*Йырсы менән ярышып,*
*Моңон бөркәр ҡурайлы;*
*Тулы ҡойроҡ, ялбыр ял,*
*Өйөр һаҡлар айғырлы. –*
*Бына шундай Уралым. (Ҡобайыр)*

*Күлен һағынып осҡан аҡҡош булып,*
*Тынлыҡ ҡайтһын өсөн йорттарға,*
*Ҡайғы, һөрөмдәрен уйҙай ҡыуып,*
*Шатлыҡ килһен өсөн ҡарттарға;*
*Йәш һылыуҙар һөйгән егеттәрен*
*Ҡаршы алып ҡапҡа төбөндә,*
*Муйынына һарылып, вәғәҙәләшеп,*
*Хаҡлы булһын өсөн үбергә;*
*Көр тауыштар яңрап торһон өсөн*
*Мәжлестәрҙә, табын янында,*
*Йәберләнгән ерҙең һәр аҙымын*
*Буя, иптәш, фашист ҡанына!*

(Х.Кәрим)

**Тестовые задания**

**Морфология һәм орфография**

**Исем**

1. *Студентмын* һүҙендә ниндәй ялғау бар?

А. Күплек ялғауы Б. Хәбәрлек ялғауы

В. Килеш ялғауы Г. Эйәлек ялғауы

Д. Бер ялғау ҙа юҡ

2. Калининск (ҡала исеме) һүҙенең урын-ваҡыт килеш формаһы ҡайһы осраҡта дөрөҫ яҙылған?

А. Калининскта Б. Калининсктә

В. Калининмкиҙә Г. Калининскиҙа

Д. Калининскийҙа

3. Бына һиңә ҡурайымды ҡалдырам. Был һөйләмдә исем ниндәй килештә бирелгән:

А. Төп килештә Б. Төбәү килештә

В. Сығанаҡ килештә Г. Төшөм килештә

Д. Эйәлек килештә

1. Күплек ялғауы ҡабул итмәгән һүҙҙе күрһәтегеҙ:

А. Уйҙарым Б. Китаптар В. Йырҙан

Г. Ҡәләмдәремде Д. Ҡолондар

5. Кейенеүе лә ябай, тыйнаҡ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙең ниндәй килештә торғанын билдәләгеҙ:

А. Төп килештә Б. Төбәү килештә

В. Сығанаҡ килештә Г. Төшөм килештә

Д. Эйәлек килештә

6. Исемгә хас булмаған грамматик категорияны күрһәтегеҙ:

А. Килеш Б. Эйәлек категорияһы

В. Хәбәрлек категорияһы Г. Йүнәлеш

Д. Һан

7. Кемеһен? Нимәһен? Был һорауҙар ниндәй килештеке?

А. Төп килеш Б. Төбәү килеш В. Сығанаҡ килеш

Г. Төшөм килеш Д. Эйәлек килеш

1.Кемдәр бирҙе <u>икмәк, аҡыл</u> иҫләп,

Кемдәр бирҙе йөкләп кәңәшен (Ф.Туғыҙбаева). Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең килешен билдәләгеҙ:

А. Төп килештә Б. Төбәү килештә

В. Сығанаҡ килештә Г. Төшөм килештә

Д. Эйәлек килештә

2.Әсәһемен һүҙендә ниндәй ялғауҙар бар?

А. Күплек һәм эйәлек заты ялғауы

Б. Эйәлек һәм хәбәрлек заты ялғауы

В. Килеш һәм эйәлек заты ялғауы

Г. Эйәлек заты ялғауы

Д. Бер ялғау ҙа юҡ

3.Беҙ <u>дуҫбыҙ</u>. Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй ялғау ҡабул иткән?

А. Эйәлек категорияһының I зат берлеге

Б. Эйәлек категорияһының I зат күплеге

В. Хәбәрлек категорияһының I зат берлеге

Г. Хәбәрлек категорияһының I зат күплеге

Д. Күплек һанда

4.Бирелгән һүҙҙәр араһынан яңғыҙлыҡ исемде күрһәтегеҙ:

А. Китап Б. Толпар В. Башҡорт

Г. Кеше Д. Ҡала

5.Күплектә, эйәлек категорияһының III зат берлеге, төшөм килештә бирелгән һүҙҙе табығыҙ:

А. Атыбыҙҙы Б. Аттарыбыҙ В. Атығыҙ

Г. Аттарығыҙҙы Д. Аттарын

6.Исемгә хас булған грамматик категорияны билдәләгеҙ:

А. Йүнәлеш Б. Һөйкәлеш В. Килеш

Г. Дәрәжә Д. Заман

7.Бирелгән эйтемдәрҙә урын-ваҡыт килештәге исем ҡайһы юлда бар?

А. Тыуған иләндә һаҡлау – ата-әсәңде яҡлау.

Б. Ас балыҡ ҡармаҡҡа тиҙ ҡаба.

В. Балды тоҙламайҙар.

Г. Иң татлы емеш – хеҙмәт емеше.

Д. Донъяла ер һөрөүҙән дә изге эш юҡ.

15. Ишмулла Дилмөхәмәтов – ҡурайсылыҡ <u>сәнғәтенең</u> традицияларына тоғро ижадсы (Р.Шәкүр). Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй килештә?

А. Төп килештә Б. Төбәү килештә

В. Сығанаҡ килештә Г. Төшөм килештә

Д. Эйәлек килештә

## Сифат

1. Артыҡлыҡ дәрәжәһендәге сифатты билдәдәләгеҙ:

А. Ҡыҙғылт Б. Ҡы:ыл В. Ҡыҙылыраҡ

Г. Ҡып-ҡыҙыл Д. Ҡыҙыл ғына

2. Сифатҡа хас булған грамматик категорияны билдәләгеҙ:

А. Заман Б. Дәрәжә В. Килеш

Г. Йүнәлеш Д. Һөйкәлеш

3. *Был ваҡытта Ҡормош (1)байҙарҙың (2) ерән (3) айғырын (4) һаллаҡ (5) ҡына (6) юрттырып (7) сей һары (8) кешмир (9) йоҡа (9) шәл бөркәнгән ҡатынды һул яғына ултыртып, Байгилде ағай үргә остан урамға килеп ингәйне* (З.Биишева). Был һөйләмдә ҡайһы һүҙҙәр сифат?

А. 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се һүҙҙәр

Б. 2-се, 4-се, 9-сы, 10-сы һүҙҙәр

В. 3-сө, 9-сы, 10-сы һүҙҙәр

Г. 3-сө, 9-сы, 10-сы, 11-се һүҙҙәр

Д. 3-сө, 6-сы, 9-сы, 10-сы һүҙҙәр

4. *Беҙҙең яҡтың ҡайындары*

*Һипкеллерәк саҡ ҡына...* (Д.Талхина). Һөйләмдә сифатты табып, уның дәрәжәһен билдәләгеҙ:

А. Төп дәрәжә Б. Сағыштырыу дәрәжәһе

В. Артыҡлыҡ дәрәжәһе Г. Аҙһытыу дәрәжәһе

Д. Һөйләмдә сифат юҡ

2. Ҡайһы рәттә шартлы сифаттар бирелгән?

А. Киң урам, матур һүрәт, тар һуҡмаҡ

Б. Алтын сәғәт, ҡышҡы юл, һауалағы торна

В. Түңәрәк күл, бейек тау, тәрән соҡор

Г. Аҡ ҡағыҙ, ерән сәс, ҡара ҡаш

Д. Оҙон буйлы,зәңгәр күҙле, бөҙрә сәсле

3. Ҡып-ҡыҙыл, бик яҡты сифаттары ниндәй дәрәжлә?

А. Төп дәрәжә Б. Сағыштырыу дәрәжәһе

В. Артыҡлыҡ дәрәжәһе Г. Аҙһытыу дәрәжәһе

Д. Был һүҙҙәр сифат түгел

7. *Еңел табыш елгә оса.* Һөйләмдә төүге һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

А. Исем Б. Ҡылым В. Алмаш

Г. Сифат Д. Рәүеш

8. Бер предметтың икенсе бер предметҡа йәки төшөнсәгә ниндәй ҙә булһа бер мөнәсәбәтен билдә итеп күрһәткән, ваҡыт, урын, материал яғынан билдәләгән сифат нисек атала?

А. Төп сифат Б. Шартлы сифат

В. Артыҡлыҡ дәрәжәһе Г. Сағыштырыу дәрәжәһе

Д. Аҙһытыу дәрәжәһе

9. Сағыштырыу дәрәжәһендәге сифатты табығыҙ:

А. Һәйбәтерәк урын, ҡыҙыҡлыраҡ китап

Б. Матур күлдәк, ҡыҙыл алма

В. Ап-аҡ ҡар, иң ҙур бүлмә

Г. Күкһел тауҙар, һорғолт ботинка

Д. Йәйге көн, тимер юл

10. Ҡайһы рәттә төп сифаттар бирелгән?

А. Ағас өҫтәл, гөлсәр ваза

Б. Ҡулындағы турғай, алыҫтағы йондоҙ

В. Киске аш, ҡышҡы урман

Г. Йоҡа шәл, алһыу сәскә

Д. Дөрөҫ яуап юҡ

## Һан

1. *Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ* (Мәҡәл). Һөйләмдә һанды табып уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Төп һан Б. Тәртип һаны В. Бүлем һаны

Г. Йыйыу һаны Д. Сама һаны

2. Ҡушма һанды табығыҙ:

А. Етмеш Б. Һигеҙ В. Йөҙ ҙә алты

Г. Мең Д. Егерме

3. Ҡайһы вариант ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған?

А. 43-өнсө күнегеү Б. 43-нсө күнегеү

В. 43-сө күнегеү Г. 43-се күнегеү

Д. 43-ө күнегеү

4. *Һәр төркөмдә алтышар уҡыусы бар.* Һөйләмдә һанды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Төп һан Б. Тәртип һаны В. Бүлем һаны

Г. Йыйыу һаны          Д. Сама һаны

5. Составында бүлем һаны булған һөйләмде күрһәтегеҙ:

А. Берәүҙән икәү яҡшы.

Б. Егәрлененең ҡулы – етәү.

В. Бишәүләп эшләгәнсе, берҙе еренә еткер.

Г. Балаларға икешәр алма тура килде.

Д. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

6. Уларҙың беренсеһенә, барыһынан да олорағы Федяға, һеҙ ун дүрт йәш бирер инегеҙ (И.Тургенев). һөйләмдә ниндәй төркөмсәгә ҡараған һандар бар?

А. Төп һан, бүлем һаны          Б. Тәртип һаны, төп һан

В. Сама һаны, бүлем һаны          Г. Тәртип һаны, йыйыу һаны

Д. Сама һаны, бүлем һаны

7. Ябай һанды табығыҙ:

А. Миллион          Б. Етмеш          В. Мең

Г. Ете          Д. Бөтәһе лә ябай һан

8. Эйәлек категорияһының II зат күплек ялғауы ҡабул иткән һанды табығыҙ:

А. Алтының, ундың          Б. Алтың, унң

В. Алтығыҙ, уныгыҙ          Г. Алтылар, ундар

Д. Алтыларҙың, ундарҙың

9. Моратша байҙың утыҙ туғыҙлыһы. Һөйләмдә бирелгән һан ниндәй мәғәнәлә ҡулланылған?

А. Улы          Б. Малайы          В. Утыҙ туғыҙ улы

Г. Аҡылға теүәл булмаған улы          Д. Аҡылға камил улы

10. –ау/-әү ялғауҙары менән ниндәй һан төркөмсәһе яһала?

А. Төп һан          Б. Тәртип һаны          В. Бүлем һаны

Г. Йыйыу һаны          Д. Сама һаны

### Алмаш

1. Исем, сифат, һан һәм башҡа һүҙ төркөмдәре урынында ҡулланылған һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

А. Ҡылым          Б. Алмаш          В. Теркәүес

Г. Ымлыҡ          Д. Рәүеш

2. *Мин сәғәт етелә уянам.* Һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Зат алмашы　　　Б. Күрһәтеү алмашы

В. Билдәләү алмашы　　　Г. Һорау алмашы

Д. Билдәһеҙлек алмашы

3. *Уның хаҡында нисек кенә еңелерәк итеп һөйләп бирергә һеҙгә?* (Ғ.Әмири). билдәләнгән һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай һәм ниндәй килештә тора?

А. Исем, төп килештә　　　Б. Алмаш, эйәлек килештә

В. Алмаш, төбәү килештә　　　Г. Алмаш, төшөм килештә

Д. Һан, сығанаҡ килештә

4. Ҡайһы юлдағы алмаштар сығанаҡ килештә генә бирелгән.

А. Беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың　　　Б. Беҙҙән, һеҙҙән, уларҙан

В. Беҙҙе, һеҙҙе, уларҙы　　　Г. Беҙҙә, һеҙҙә, уларҙа

Д. Беҙгә, һеҙгә, уларға

5. Бирелгән һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ: *Бөтә ер дерелдәй* (Ғ.Әмири).

А. Зат алмашы　　　Б. Күрһәтеү алмашы

В. Билдәләү алмашы　　　Г. Һорау алмашы

Д. Билдәһеҙлек алмашы

6. Һорау алмаштарын күрһәтегеҙ:

А. Үҙем, үҙең, үҙебеҙ, үҙегеҙ

Б. Ҡайҙа, ҡасан, кем, ниндәй

Г. әллә кем, кемдер, нимәлер

Д. Мин, һиңә, уны, беҙҙә

4. Күрһәтеү алмаштарын күрһәтегеҙ:

А. Үҙем, үҙең, үҙебеҙ, үҙегеҙ

Б. Ҡайҙа, ҡасан, кем, ниндәй

В. Был, ошо, шул, теге

Г. Әллә кем, кемдер, нимәлер

Д. Мин, һиңә, уны, беҙҙә

8. *Кемдер ишек шаҡый.* Һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Зат алмашы　　　Б. Күрһәтеү алмашы

В. Билдәләү алмашы　　　Г. Һорау алмашы

Д. Билдәһеҙлек алмашы

9. Эйәлек килештәге билдәһеҙлек алмашын күрһәтегеҙ:

А. Кемдеңдер, нимәнеңдер Б. Кемдерҙең, нимәлерҙең

В. Кемдең, нимәнең Г. Кемемдер, нимәмдер

Д. Кемдер, нимәлер

10. Ул бөтәһен дә бер юлы һөйләп китте (С.Агиш). Һөйләмдә билдәләү алмашын табып, уның грамматик категорияларын билдәләгеҙ:

А. 3-сө эйәлек заты берлектә, төп килештә

Б. 3-сө эйәлек заты берлектә, төбәү килештә

В. 3-сө эйәлек заты берлектә, сығанаҡ килештә

Г. 3-сө эйәлек заты берлектә, төшөм килештә

Д. 3-сө эйәлек заты берлектә, эйәлек килештә

**Ҡылым**

1. Йыйылыш башланған. Был һөйләмдәге ҡылым ниндәй замандыбелдерә?

А. Хәҙерге заман Б. Шаһитлы үткән заман

В. Шаһитһыҙ үткән заман Г. Билдәле киләсәк заман

Д. Билдәһеҙ киләсәк заман

2. Эшләштем ҡылымының йүнәлешен билдәләгеҙ:

А. Төп йүнәлеш Б. Ҡайтым йүнәлеше

В. Төшөм йүнәлеше Г. Уртаҡлыҡ йүнәлеше

Д. Йөкмәтеү йәнәлеше

3. Икенсе затҡа ҡараған һәм күплектә торған ҡылымды табығыҙ:

А. Уҡыйҙар Б. Киләбеҙ В. Йоҡлай

Г. Яҙаһығыҙ Д. Уҡыйым

4. Хат <u>ташыусы</u> апай бөгөн дә беҙгә инмәне. Һөйләмдә ниндәй ҡылымдың аҫтына һыҙылған?

А. Исем ҡылым

Б. Сифат ҡылымдың хәҙерге заман формаһы

В. Хәл ҡылым

Г. Сифат ҡылымдың үткән заман формаһы

Д. Уртаҡ ҡылым

5. Һөйләүсенең булып үткән эш-хәлде күреп-белеп һөйләүен ҡылымдың ниндәй заман формаһы белдерә.

А. Хәбәр һөйкәлешенең шаһитлы үткән заманы

Б. Шарт һөйкәлеше

В. Теләк һөйкәлеше

Г. Хәбәр һөйкәлешенең шаһитһыҙ үткән заманы

Г. Хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заманы

6. *Барыһы ла уны йотлоғоп тыңлай.* Һөйләмдә ҡылымды табып, уның һөйкәлешен билдәләгеҙ:

А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше

В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше

Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

7. Ҡылымға хас булмаған грамматик категорияны билдәләгеҙ:

А. Заман Б. Дәрәжә В. Зат

Г. Йүнәлеш Д. Һөйкәлеш

8. *Сигенмәҫкә!* Ҡылымдың төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Исем ҡылым

Б. Сифат ҡылымдың хәҙерге заман формаһы

В. Хәл ҡылым

Г. Сифат ҡылымдың үткән заман формаһы

Д. Уртаҡ ҡылым

9. Ҡылымдың ниндәй һөйкәлеше – *һа/-һә* ялғауҙары менән яһала:

А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше

В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше

Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

10. *Әйткән<u>мен</u>.* Билдәләнгән ялғау ниндәй категорияны белдерә:

А. Эйәлек заты ялғауы

Б. I зат хәбәрлек заты ялғауы

В. III зат хәбәрлек заты ялғауы

Г. II зат хәбәрлек заты ялғауы

Д. Килеш ялғауы

11. Эш-хәрәкәтте башҡарырға теләүҙе йәки уны үтәргә саҡырыуҙы ҡылымдың ниндәй һөйкәлеше белдерә?

А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше

В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше

Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

12. Оҙаҡламай күк үлән өҫтөнә балаҫ түшәп, ишек алдына сәй урыны әҙерләнде (З.Биишева). билдәләнгән ҡылым ниндәй йүнәлештә?

А. Төп йүнәлеш Б. Ҡайтым йүнәлеше

В. Төшөм йүнәлеше Г. Уртаҡлыҡ йүнәлеше

Д. Йөкмәтеү йөнәлеше

13. Шарт һөйкәлеше булған һөйләмде билдәләгеҙ:

А. Бөгөн мин унда бармаҡсымын

Б. Йөрөүҙәрем бушҡа булмаһы

В. Ул беҙгә кисә килгән

Г. Күп көлһәң, иларһың.

Д. Бөгөн көн әҙерәк асылды.

14. Ҡылымдың заман категорияһы ниндәй һөйкәлешкә хас:

А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше

В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше

Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

15. Башланғыс формала бирелгән ҡылымды билдәләгеҙ:

А. Башла Б. Башланы В. Башлаһын

Г. Баш Д. Башлайыҡ

### Рәүеш

1. Ғәли тиҙ яҙа, шәп уҡый. Был һөйләмдәге рәүештәрҙең төрөн билдәләгеҙ:

А. Хәл рәүеше Б. Ваҡыт рәүеше

В. Урын рәүеше Г. Сәбәп-маҡсат рәүеше

Д. Күләм-дәрәжә рәүеше

2. Атай, йортоң тәҙрәләре
Үтә лә ҙур уйылған. (Д.Талхина)

Һөйләмдә рәүеште табып, дәрәжәһен билдәләгеҙ:

А. Аҙһытыу дәрәжәһе Б. Артыҡлыҡ дәрәжәһе

В. Сағыштырыу дәрәжәһе Г. Төп дәрәжә

Д. Һөйләмдә рәүеш юҡ

3. Ул алпан толпан баҫып сығып китте. Һөйләмдә парлы рәүеште табып, уның дөрөҫ яҙылышын билдәләгеҙ:

А. Айырым яҙыла

Б. Ҡушып яҙыла

В. Һыҙыҡ аша яҙыла

Г. Араларында өтөр ҡуйыла

Ď. Һөйләмдә рәүеш юҡ

4. Сәрбиямал хужаларса ҡыйыу атлап өйгә инде (З.Биишева). Билдәләнгән һүҙ ниндәй рәүеш төркөмсәһенә ҡарай?

А. Төп рәүеш		Б. Оҡшашлыҡ рәүеше

В. Ваҡыт рәүеше		Г. Урын рәүеше

Ď. Күләм–дәрәжә рәүеше

5. Ҡайһы юлда күләм–дәрәжә рәүештәре бирелгән:

А. Юҡҡа, юрый, юрамал

Б. Бер аҙ,әҙ-мәҙ, бер юлы, күп

В. Беҙҙеңсә, уларса, йәштәрсә

Г. Юғары, яҡын, алыҫ

Ď. Иртәгә, аҙаҡ, тиҙҙән

6. Рәүеш ниндәй грамматик үҙенсәлектәре буйынса сифатҡа оҡшаған?

А. Предметтың билдәһен белдерә һәм дәрәжә менән үҙгәрә

Б. Эш–хәлдең билдәһен белдерә һәм дәрәжә менән үҙгәрә

В. Билдәне белдерә һәм дәрәжә менән үҙгәрә

Г. Билдәне белдерә

Ď. Дәрәжә менән үҙгәрә

7. Ваҡыт рәүеше булған һөйләмде табығыҙ:

А. Айҙар шатлығынан үрле–ҡырлы һикерҙе.

Б. Малай олатаһының уға юрамал асыуланыуын аңланы.

В. Муса Гәрәев һауаға 250 тапҡыр күтәрелә.

Г. Ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны.

Ď. Көпә-көндөҙ йоҡлаған көн күрмәҫ.

8. Рәүештең сағыштырыу дәрәжәһе ... аффикстары ҡушылып яһала:

А. –лата/-ләтә

Б. –дай/-дәй, ҙай/-ҙәй, -лай/-ләй, -тай/-тәй

В. –раҡ/-рәк, -ыраҡ/-ерәк, -ораҡ/-өрәк

Г. –са/-сә

Ď. –ын/-ен, -он/-өн.

9. Ҡайһы юлда тамыр рәүештәр бирелгән?

А. Тегеләй, былай, башҡортса, инглизсә, йәшләй

Б. Йыш, элек, тиҙ, һуң, шәп

В. Быйыл, иртәнсәк, бөгөн

Г. Илке–һалҡы, иртәле–кисле, һирәк–һаяҡ, үрле–ҡырлы

Д. Аяҡ үрә, ялан баш, баш түбән, көн оҙон

10. Артыҡлыҡ дәрәжәһендәге рәүеш булған һөйләмде табығыҙ:

А. Атай йырҙың һүҙҙәрен бик асыҡ әйтеп йырланы.

Б. Саф һауала күберәк йөрөргә кәрәк.

В. Көн дә иртәнсәк бүлмәне елләтергә кәрәк.

Г. Ауыл советы канцелярияһында шәмгә ут башҡа өйҙәргә ҡарағанда һуңыраҡ алынды.

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре**

1. *Дуҫың менән кәңәшләш.* Бәйләүес ниндәй килештәге һүҙҙән һуң килгән?

А. Төп килештәге Б. Эйәлек килештәге

В. Төшөм килештәге Г. Сығанаҡ килештәге

Д. Төбәү килештәге

2. Түбәндәге теркәүестәрҙең төрөн билдәләгеҙ: *шуға, шуға күрә, шунлыҡтан, шуның һөҙөмтәһендә*

А. Бүлеү теркәүестәре

Б. Ҡабатлау теркәүестәре

В. Һығымта яһау теркәүестәре

Г. Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре

Д. Йыйыу теркәүестәре

3. Киҫәксәләрҙе күрһәтегеҙ:

А. Сөнки, әгәр, хатта, йә, йәки

Б. Ах, ох, ух, эх, ай–һай, ура

В. Ғына, генә, ҡына, кенә

Г. Өсөн, кеүек, тураһында, һымаҡ

Д. Бар, юҡ, түгел, буғай, кәрәк

4. *Гөрһөлдәү бер алыҫлашып, бер яҡынлашып һаман дауам итте* (З.Биишева). Һөйләмдә теркәүестәрҙе табып, уларҙың төрөн билдәләгеҙ:

А. Йыйыу теркәүестәре

Б. Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре

В. Бүлеү теркәүестәре

Г. Аныҡлау теркәүестәре

Д. Эйәртеү теркәүестәре

5. Бәйләүестәрҙе күрһәтегеҙ:

А. Сөнки, әгәр, хатта, йә, йәки

Б. Ах, ох, ух, эх, ай–һай, ура

В. Ғына, генә, ҡына, кенә

Г. Өсөн, кеүек, тураһында, һымаҡ

Д. Бар, юҡ, түгел, буғай, кәрәк

6. Ҡапҡа төбөндә Иштуған ғына тороп ҡалды (З.Биишева). Һөйләмдә киҫәксәне табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Көсәйтеү, раҫлау киҫәксәһе

Б. Икеләнеү киҫәксәһе

В. Һорау киҫәксәһе

Г. Сикләү киҫәксәһе

Д. Билдәләү киҫәксәһе

7. Ымлыҡтарҙы билдәләгеҙ:

А. Әгәр, сөнки, хатта, йә, йәки

Б. Их, эх, уф–ф, ай–һай, эй–й

В. Ғына, генә, үк, кенә

Г. өсөн, сәбәпле, менән, кеүек

Д. Бар, юҡ, кәрәк, дөрөҫ, түгел

8. Мөнәсәбәт һүҙ булған һөйләмде табығыҙ:

А. Ул аталарса ярҙам итте.

Б. Хәлимәнең был турала күп ишеткәне бар.

В. Өмәгә былардан тыш байтаҡ ҡына егеттәр саҡырылған.

Г. Ауылға табан юл тотайыҡ, юҡһа һәләк булырбыҙ бит

Д. Көтөүсе шунда уҡ риза булды.

## Синтаксис һәм пунктуация

1. Өндәш һүҙ эргәһендә тыныш билдәләре дөрөҫ ҡуйылған һөйләмде табығыҙ:

А. Ҡайҙа юл тоттоң әле Әхмәт?

Б. Һау бул йәндәй күргән өләсәйем.

В. Ә һин Хәмит атыңды мен дә хәҙер үк Ташбатҡанға кит.

Г. Йә, Әхмәҙи ағай, иҙәнеңде тигеҙләп алайыҡ.

Д. Егеттәр әйҙәгеҙ булмаһа һыу инеп алайыҡ.

2. Өлкән сержант, йәғни беҙҙең командир, миңә күҙ төшөрөп алды. (Ғ. Аллаяров) Был һөйләмдә өтөрҙәрҙең ни өсөн ҡуйылғанын аңлатығыҙ:

А. Өҫтәлмәлекте айырыу өсөн

Б. Өндәш һүҙ эргәһендә

В. Тиң эйәләр эргәһендә

Г. Өтөрҙәр урынында һыҙыҡтар ҡуйылырға тейеш

Д. Инеш һүҙбәйләнеш эргәһендә ҡуйылған

3. Ҡарағат, бөрлөгән, муйыл, балан – бөтәһе лә бар. Был һөйләмдә һыҙыҡтың ни өсөн ҡуйылғанын аңлатығыҙ:

А. Дөйөмләштереүсе һүҙ алдында ҡуйылған

Б. Баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм араһында ҡуйылған

В. Инеш һүҙҙе айырыу өсөн ҡуйылған

Г. Бер үк һүҙ төркөмөнән килгән эйә менән хәбәр араһында ҡуйылған

Д. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр араһында ҡуйылған

4. Ямғыр төндә туктаған. Был һөйләмдә ямғыр һүҙе ниндәй һөйләмкисәге булып килгән?

А. Эйә Б. Хәбәр В. Тултырыусы

Г. Аныҡлаусы Д. Хәл

1. Хәбәр һөйләмде күрһәтегеҙ:

а. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

Б. Ҡайҙа юл тоттоң?

В. Ҡыш көндәре үтеп, яҙ етте.

Г. Тау-таш ярыр ир-азаматтары һыната буламы?

Д. Дан һиңә, дан, Башҡортостаным!

6. Ул <u>дыуамал</u> һөргөн китә инде. Аҫтына һыҙылған һүҙ эргәһендә ниндәй тыныш билдәләре ҡуйылырға тейеш?

А. Ике яғынан да һыҙыҡ ҡуйыла

Б. Бер яғынан һыҙыҡ, икенсе яғынан өтөр ҡуйыла

В. Бер ниндәй ҙә тыныш билдәһе ҡуйылмай

Г. Ике яғынан да өтөр ҡуйыла

Д. Башҡа бер тыныш билдәһе ҡуйыла

7. Бөгөн бик һыңлап торолдо. Һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ

А. Билдәле эйәле һөйләм

Б. Билдәһеҙ эйәле һөйләм

В. Дөйөм эйәле һөйләм

Г. Эйәһеҙ һөйләм

Д. Атама һөйләм

8. Кинйәголдар барғанда, өсөнсө смена эштән туктамағайны әле. Был ниндәй һөйләм?

А. Ябай һөйләм

Б. Эйәртеүле ҡушма һөйләм

В. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм

Г. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм

Д. Бер составлы һөйләм

9. Түбәндәге һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйырға кәрәк: *Ер йөҙөндә яңынан һуғыш дауылы ҡупмаһын (?) бөтә әсәләрҙең теләге шул.*

А. Өтөр Б. Һыҙыҡ В. Ике нөктә

Г. Нөктәле өтөр Д. Тыныш билдәһе кәрәкмәй

10. Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ: *Томан таралғас, көн асылды.*

А. Урын һөйләм Б. Ваҡыт һөйләм

В. Рәүеш һөйләм Г. Күләм-дәрәжә һөйләм

Д. Сәбәп һөйләм

11. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәр бер-береһе менән ниндәй бәйләнештә тора икәнен асыҡлағыҙ: Һөйләшеү араһында берәү бейергә төшөп китә, берәү һыҙҙырып гармунда уйнай, берәү йырлай.

А. Һанап китеү

Б. Ҡаршы ҡуйыу

В. Дөйөмләштереү

Г. Икенсеһенең мәғәнәһен асыҡлау

Д. Икенсеһенең мәғәнәһен тултырыу

12. Эйәрсән һөйләме тултырыусы һөйләм булған вариантты күрһәтегеҙ:

А. Гөлйөҙөмдөң хаты яҙылып бөтөүгә, Хәмдиә килеп инде.

Б. Күңел ни ҡушһа, ҡул шуны башҡара.

В. Матур килде быйыл бал яҙы.

Г. Ат аунаған ерҙә төк ҡала.

Д. Аҙыҡ мул ерҙә ауырыу булмай.

13. Теҙмә ҡушма һөйләмде билдәләгеҙ:

А. Аяҡ аҫты дерелдәп тора, сөнки күтерлек башлана.

Б. Хөрмәт иткән хөрмәт күрер.

В. Урман ҡалын, ағастары бик бейек булғанлыҡтан, юлға ҡояш төшмәй.

Г. Ҡулың оҫта булһын, һүҙең ҡыҫҡа булһын

Д. Ямғыр тымғанда, төн уртаһы еткәйне инде.

14. *Хәмдиә әбей кеше менән һүҙгә килешмәҫ, ғәйбәт һөйләмәҫ, берәүҙе лә тикшермәҫ.* Төҙөлөшө буйынса был ниндәй һөйләм?

А. Йыйнаҡ һөйләм

Б. Кәм һөйләм

В. Ҡушма һөйләм

Г. Тиң киҫәктәр менән ҡатмарландырылған һөйләм

Д. Бер составлы һөйләм

15. Аҡселән өҫтөндә таң тантана итә, ҡоштар һайраша, аҡһыл күк томан күтәрелә, тотош офоҡ киң ҡыҙыл байраҡ тартҡан һымаҡ алһыуланып яҡтыра бара, иртәнге тынлыҡты ярып, тракторҙар эшкә тотона. Был ҡушма һөйләм нисә ябай һөйләмдән төҙөлгән?

А. Ике Б. Өс В. Дүрт

Г. Биш Д. Алты

16. Өй алдында оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ниндәй һүҙбәйләнеш төрөнә ҡарай?

А. Ярашыу Б. Башҡарылыу

В. Йәнәшәлек Г. Һөйкәлеү

Д. Теҙмә һүҙбәйләнеш

17. Был донъяла көслө түгел, еңә, балам, түҙемле. Һөйләмдә эйәне табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ:

А. Исем Б. Сифат В. Һан

Г. Ҡылым Д. Алмаш

18. Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү сараһын билдәләгеҙ. Әгәр умарталағы инә ҡорт үлһә, ҡалған ҡорттар теләһә ҡайһы яҡҡа таралып бөтәләр.

А. Килеш ялғауҙары ярҙамында

Б. Интонация ярҙамында

В. Бәйләүес ярҙамында

Г. Шарт һөйкәлеше ярҙамында

Д. Теркәүес ярҙамында

19. Тиң булмаған аныҡлаусылары булған һөйләмде табығыҙ:

А. Хәбир сажин буйлы, баһадир кәүҙәле, ыласын кеүек ҡыйыу, яҡты ҡарашлы, шат, шаян егет булып үҫте.

Б. Һеҙҙә эре биҙәкле ҡыҙыл тауарҙар күп буғай.

В. Батыр йөрәкле, аҙ һүҙле, сабый күңелле беҙҙең командир ана шунда ул.

Г. Күҙҙең яуын алалар аҡ, һары, ал сәскәләр.

Д. Тәҙрә ҡапҡастары күк, зәңгәр төҫтәргә буялған.

20. Составында инеш һүҙ булған һөйләмде табығыҙ:

А. Һин, Рәжәпов, минән бәхетлерәк – әсәйең бар.

Б. Һинеңсә эшләп ҡарарбыҙ.

В. Был һеҙгә, йәштәргә, ҡарата әйтелмәгән.

Г. Минеңсә, эште бер ҡасан да шикләнеп башларға ярамай.

Д. Мин, ябай һалдат кеше, уға ҡаршы һүҙ таба алмайым.

**Өҙөктө уҡығыҙ. Ҡурай тураһында әйтелгән фекерҙәр менән ризаһығыҙмы? Иҫбатлап һөйләгеҙ.**

Ҡысҡырмай Аҫылбай, күкрәк менән йырлай, рәхмәт төшкөрө, моңо, әйтерһең, йөрәгенән һығылып сыға. Электән, бала саҡтан уҡ тынып ҡына тыңлай алмай ҡурай моңон Әхмәтҙәки. Ҡайҙалыр йыраҡҡа, сал тарихҡа, аҡбуҙаттар, Урал батырҙар тормошона алып киткәндәй, онотолған тойғоларҙы, йоҡомһораған тамырҙарҙы терелтеп ебәргәндәй ҡурай моңо... Тыпыр-тыпыр аттар уҙышҡаны, йәшел туғайҙарҙа ҡойроҡ сәнсеп ҡолондар сабышҡаны, тау яғалап ҡуйҙар йөрөгәне, үләндәр, йылғалар һөйләшкәне лә, балаларын юғалтҡан инә бүре илауы, ер һыҡтауы ла бар унда... Тәбиғәттә үҫкәнгә шулай тәбиғи моңдар сығара микән ул? Их ҡурай, моңло ҡурай...

(Р.Байымов.)

**Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.**

Аҡҡа ҡара тиҙ тейә. Алтын сүплектә лә ялтырай. Һандуғас юҡ йылды ҡарға дан тотор. Шайтан таяғын ҡырау һуҡмай. Күҙең менән күрмәгәнде ауыҙың менән һөйләмә. Яман хәбәр тиҙ тарала. Уҡымаған күҙлене уҡыған һуҡыр еңгән. Ҡәләм ҡылыстан үткер.

**Күп нөктәләр урынына тейешле бәйләүес йәки теркәүес ҡуйып, хикәйәне уҡығыҙ, йөкмәткеһен киңәйтеп һөйләгеҙ.**

ҮРЛӘҮ

Бер бала ағасҡа үрмәләй. Өҫкә менгән һайын баҫҡан бер ботағын тырышып-тырышып һындырып төшөрә бара. Ағастың осона еткәс, ниндәйҙер ғорурлыҡ менән тирә-яҡты байҡап тора, һәм кире төшә башлай. Аяҡтары менән һындырған ботаҡ урындарын һәрмәп ҡарай, әммә улар таяныс булырлыҡ түгел шул инде. Шунлыҡтан ул, олонға йәбешеп, ҙур ҡыйынлыҡ менән аҫҡа шыла, тотонорға хәле етмәй, шыуып төшөп китә лә ботон, беләктәрен ҡанға туҙҙырғансы һыҙырта.

